# “ТУҒАН (БАШҠОРТ) ТЕЛЕ” ПРЕДМЕТЫНЫҢ ӨЙРӘНЕҮ ҺӨҘӨМТӘЛӘРЕ

Төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт теле курсының йөкмәткеһе белем биреү процесында метапредмет һәм предмет маҡсаттарына өлгәшеүгә йүнәлдерелгән. Был үҙ йәһәтендә коммуникатив, тел, лингвистик һәм мәҙәни компетенцияны формалаштырыуҙы һәм үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

**Коммуникатив компетенция** телмәр эшмәкәрлегенең төрҙәре, һөйләү һәм яҙма телмәр төрҙәрен үҙләштереүҙе иҫәптә тота, тел материалын һәм күнекмәләрҙе кәрәкле ситуацияларҙа ҡуллана алыуҙы талап итә. Коммуникатив компетенция аралашыуҙың маҡсатын билдәләй, телмәр ситуацияһын баһалай белеүҙе, аралашыусының коммуникация ысулдарын һәм ниәттәрен иҫәпкә алыуҙы, адекват стратегик аралашыуҙы һайлауҙы һәм үҙ телмәреңде аңлы рәүештә үҙгәртеүгә әҙер булыуҙы күҙ уңында тота.

**Тел һәм лингвистик компетенция** йәмғиәт күренеше булараҡ, тел тураһында тейешле белемде формалаштырыуҙы аңлата; башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын үҙләштереү; һүҙлек запасын һәм уҡыусы телмәренең грамматик төҙөлөшөн байытыу; фән булараҡ лингвистика тураһында тейешле белем, уның төп бүлектәренә кәрәкле булған тел күренешен һәм факттарын анализлау һәм баһалау мөмкинлеген формалаштырыу; төрлө төрҙәге лигвистик һүҙлектәр менән ҡуллана белеү.

**Мәҙәни компетенция** башҡорт теленең мәҙәнәтен сағылдырыусы форма булараҡ аңлауҙы күҙ уңында тота, тел һәм халыҡ тарихының бәйләнештә булыуын, башҡорт теленең милли - мәҙәни үҙенсәлеген, башҡорт телмәр этикет нормаларын үҙләштереүҙе, халыҡ - ара аралашыу мәҙәниәтен үҙләштереү; милли мәҙәни компонентлы һүҙҙәр мәғәнәһен аңлатыуҙы белдерә.

Башҡорт теле курсының коммуникатив - эшмәкәрлек йүнәлешен көсәйтеү, уны белем алыуҙа метапредмет һөҙөмтәләргә йүнәлтеү кешенең тышҡы мөхиткә тиҙ яраҡлашыу һәләтле һәм унда әүҙем эшмәкәрлекте дауам итеүгә һәләтле булараҡ, функциональ грамоталылыҡты формалаштырыуҙың мөһим шарттары булып тора.

Функциональ грамоталыҡтың мөһим индикаторы – предмет-ара статус: **коммуникатив универсаль уҡыу эшмәкәрлеге** (телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәре менән эш итеү, тиңдәштәре һәм оло кешеләр менән аралашыуҙы ҡороу; телдән һәм яҙма телмәрҙе адекват ҡабул итеү; ҡуйылған проблема буйынса үҙ ҡарашыңды теүәл, дөрөҫ, логик яҡтан төҙөк һәм тасуири әйтеп биреү, аралашыу прцесында яҙма һәм һөйләү телмәре нормаларын һәм башҡорт телмәр этикетын һаҡлау); **танып белеү универсаль укыу эшмәкәрлеге** (проблеманы аныҡлау, дөрөҫ аргументлай белеү, логик

яҡтан төҙөк фекер йөрөтөү, иҫбатлай табыу, раҫлаусы йә кире ҡағыусы тезис килтереү; библиографик эҙләнеүҙе торошҡа ашырыу, төрлө сығанаҡтарҙан кәрәкле мәғлүмәтте алыу, төп һәм өҫтәмә мәғлүмәтте билдәләү, уҡыу маҡсатын асыҡлау, аралашыу маҡсатынан сығып уҡыу төрөн һайлау; мәғлүмәти - компьютер сараларын ҡулланыу; мәғлүмәтте системаға килтереү һәм киренән эшкәртеү һәм уны төрлө ысулдар менән күрһәтеү һ.б.); **регулятив универсаль уҡыу хәрәкәте** (эшмәкәрлек маҡсатын ҡуя һәм аныҡ итеп әйтә белеү, эшмәкәрлекте эҙмә - эҙлекле планлаштыра һәм кәрәк саҡта үҙгәртә белеү; үҙ контроль, үҙ баһалау, үҙ коррекциялау һ.б. тормшҡа ашырыу.) Функциональ грамоталылыҡтың мөһим компоненты телмәр эшмәкәрлеге төрҙәренә нигеҙләнә һәм мәктәптә башҡорт телен өйрәнеү аша уҡыусыларҙың фекерләү һәләтен маҡсатлы йүнәлештә үҫтереүҙе күҙ уңында тота.

Функциональ грамоталылыҡты формалаштырыу, уҡыусыларҙың телмәр эшмәкәрлеген камиллаштырыу, башҡорт теленең төҙөлөшө һәм аралашыуҙың төрлө шарттарында уны ҡулланыу үҙенсәлектәрен белеү нигеҙендә төҙөлә. Уҡыу процесы телде анализлау күнекмәләрен формалаштырыуға ғына йүнәлдерелгән булырға тейеш түгел, ә шулай уҡ телмәр мәҙәниәтен тәрбиәләү, тормошта мөһим күнекмәләрҙе формалаштырыу, төрлө уҡыу төрҙәрен ҡулланыу, тексты мәғлүмәти эшкәртеү, мәғлүмәтте төрлө формала эҙләү, телмәр ситуацияһына, әҙәби тел нормаларына һәм аралашыуҙың этик нормаларына яраҡлы төрлө ысулдарын файҙаланыу. Шулай итеп, төп дөйөм белем биреү мәктәптәрендә башҡорт телен уҡытыу баланың дөйөм мәҙәни кимәлен үҫтереүгә, артабан уҡыуын төрлө белем биреү учреждениеларында дауам итә алырлыҡ кимәлдә булырға тейеш.

Төп мәктәп сығарылыш уҡыусыларының башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең **шәхси һөҙөмтәләре**:

1) башҡорт телен башҡорт халҡының төп милли - мәҙәни ҡиммәте булараҡ аңлау, интеллектуаль, ижади һәләттәрен һәм шәхестең мораль - этик сифаттарын үҫтереүҙә башҡорт теленең роле, уның мәктәптә белем алыу процесындағы әһәмиәтен билдәләү;

2) башҡорт теленең эстетик ҡиммәтен аңлау; башҡорт теленә ҡарата ихтирам, уның менән ғорурланыу тойғоһо тәрбиәләү; милли мәҙәни сағылыш булараҡ, башҡорт теленең таҙалығын һаҡлау тураһында хәстәрлек күреү; телмәр үҙ камиллаштырыуға ынтылыу;

3) аралашыу процесында кәрәкле һүҙлек запасын эйә булыу һәм үҙ фекереңде иркен еткереү өсөн тейешле грамматик сараларҙы үҙләштереү; үҙ телмәреңде күҙәтең һәм уны баһалау күнекмәһен булдырыу.

Башҡорт теле программаһын үҙләштереүҙең **метапредмет һөҙөмтәләре**:

1) телмәр эшмәкәрлегенең бөтә төрҙәрен үҙләштереү:

***аудирование һәм уҡыу:***

- телдән һәм яҙма хәбәр иткән мәғлһмәтте (коммуникатив йүнәлеш, текст темаһы, төп фекер; төп һәм өҫтәмә мәғлүмәт) адекват ҡабул итеү;
- төрлөсә уҡыу күнекмәләрен булдырыу (эҙләнеү, ҡарап сығыу, танышыу, өйрәнеү), төрлө стилдәге, жанрҙағы текстарҙы үҙләштереү;
- төрлө стилдәге һәм жанрҙағы тексты ишетеп, адекват ҡабул итеү; төрлө төрҙәге аудирование менән эш итеү (һайлап алыу, танышыу);
- төрлө сығанаҡтарҙан мәғлүмәтте һайлап алыу һәләтлеге (матбуғат саралары, уҡыу өсөн тәғәйенләнгән компакт - дискылар, Интернет ресурстары); төрлө типтағы һүҙлектәр менән иркен ҡулланыу, белешмә өсөн әҙәбиәт, шулай уҡ электрон ҡулланмаларҙан һайлап алыу күнекмәләрен булдырыу;
- һайлап алыу алымдары менән эш итә белеү һәм тәғәйен темаға материалды системаға килтереү; уҡыу йә аудирование һөҙөмтәһендә алынған мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте үҙ аллы эҙләй алыу күнекмәләренә эйә булыу; мәғлүмәтте ҡайтанан эшләй алыу, еткерә белеү;
- стилистик үҙенселектәрҙе иҫәпкә алып, йөкмәткенән һәм ҡулланылған тел сараларынан сығып, фекерҙе сағыштыра алыу;

***һөйләү һәм яҙыу:***

- алдағы уҡыу эшмәкәрлегенең (индивидуаль һәм коллектив) маҡсатын билдәләү һәләтлелеген, хәрәкәттең эҙмә - эҙлелеге, өлгәшелгән һөҙөмтәләрҙе баһалау һәм уларҙы телдән һәм яҙма формала адекват аныҡ итеп әйтеү;
- тыңлаған йә уҡылған тексты тәҡдим ителгән кимәлдә (план, һөйләү, конспект, аннотация) һөйләй алыу;
- төрлө стилдә һәм жанрҙа, адресланыуға ҡарап һәм аралашыу ситуацияһына ҡарап телдән һәм яҙма текст төҙөй алыу;
- телдән һәм яҙма формала үҙ фекереңде иркен еткерә белеү, тексты логик яҡтан эҙмә - эҙлекле төҙөү талаптарын һаҡлау;
- төрлө төрҙәге монологты (хәбәрләү, һүрәтләү, фекер йөрөтөү; төрлө төрҙәге монологтарҙың берләшеүе) һәм диалог (этикеты һүҙ эсенә алған, диалог - һорашыу, диалог - аралашыуға өндәү, диалог - фекер алышыу һ.б; төрлө төрҙәге диалогтың берләшеүен) үҙләштереү;

- ғәмәлдә төрлө телмәрҙәге аралашыуҙың орфоэпик, лексик, грамматик, хәҙерге башҡорт әҙәби теленең стилистик нормаларын һәм яҙма телдә төп орфографик һәм пунктуацион ҡағиҙәләрҙе һаҡлау;
- телмәр этикет нормаларын һаҡлап, аралаша алыу, телмәр аралашыу процесында ым-ишара, мимиканы урынлы ҡулланыу;
- уҡыу процесында һәм көндәлек аралашыуҙа үҙ контролдә тота алыу; йөкмәткенән, һүҙҙәрҙе урынлы ҡулланыуҙан сығып, үҙ телмәреңде баһалай белеү; грамматик һәм телмәр хаталарын таба һәм уларҙы төҙәтә алыу; үҙ тексыңды мөхәррирләү һәм камиллаштыра белеү;

2) алынған белем һәм күнекмәләрҙе көндәлек тормошта ҡуллана белеү; башҡорт теленән башҡа фәндәрҙә белем алыу сығанағы булараҡ файҙаланыу;

3) аралашыу процесында тир - яҡтағы кешеләр менән коммуникатив маҡсатлы бәйләнештә, ниндәйҙер эш төрөн бергә эшләү, бәхәстә, күтәрелгән көнүҙәк темаларҙа фекер алышыуҙа ҡатнашыу; шәхестәр менән мәҙәни аралашыу барышындағы төрлө ситуациялаҙа телмәр этикетының мили - мҙәни нормаларын үҙләштереү.

Предмет һөҙөмтәләре:

1) телдең төп функциялары тураһында, башҡорт теленең башҡорт халҡының милли теле, Башҡортостан Республикаһының дәүләт теле булыуы тураһында, тел менән халыҡ мәҙәниәтенең бәйләнештәре тураһында, кеше һәм йәмғиәт тормошондағы роле тураһында ҡараш булдырыу;

2) гуманитар фәндәр системаһында башҡорт теленең урынын һәм мәғарифта тулыһынса уның ролен аңлау;

3) башҡорт теле тураһында төп фәнни нигеҙҙе үҙләштереү; уның кимәл һәм берәмектәр бәйләнешен аңлау;

4) тел ғилеменең төп аңлатмалары: лингвистика һәм уның төп бүлектәре; тел һәм телмәр, телмәр аралашыуы, һөйләү һәм яҙма телмәр, монолог, диалог һәм уларҙың төрҙәре; аралашыу ситуациялары, фәнни, публицистик, рәсми - эшлекле стилдәр, матур әҙәби тел;

5) башҡорт теленең лексикаһы һәм фразеологияһының төп стилистик ресурстарын, башҡорт әҙәби теленең төп нормаларын, һөйләү этикет нормаларын үҙләштереү;

6) телдең төп берәмектәрен, грамматик категорияларын анализлау һәм таныу, тел берәметәрен аралашыу шарттарына ярашлы ҡулланыу;

7) һүҙгә төрлө анализ төрҙәрен (фонетик, морфематик, һүҙьяһалыш, лексик, морфологик), төп билдә һәм структура күҙлегенән сығып, күп аспектлы анализ яһау;

8) тел - һүрәтләү саралары һәм уларҙы үҙ телмәрендә ҡулланыу;

9) башҡорт теленең эстетик функцияһын таныу, матур әҙәбиәт текстарын анализлағанда телмәрҙең эстетик кимәлен баһалау.

## УҠЫУ ПРЕДМЕТЫНЫҢ (КУРС) ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Башланғыс кластарҙа морфология һәм орфографиянан үтелгәндәрҙе ҡабатлау, системалаштырыу, нығытыу

Һүҙҙең морфологик киҫәктәре: тамыр һәм ялғауҙар. Ҡалын һәм нәҙек ялғауҙар. Исемдәрҙең һан, килеш менән үҙгәреше, күплек һәм килеш ялғауҙарының дөрөҫ яҙылышы. Яңғыҙлыҡ исемдәрҙең дөрөҫ яҙылышы. Сифат. Дәрәжәләре. Һандарҙың дөрөҫ яҙылышы. Һандарҙа, даталарҙа ялғауҙарҙың дөрөҫ яҙылышы. Ҡылымдар, уларҙың заман, һан, зат һәм барлыҡ - юҡлыҡ менән үҙгәреше. Фонетик анализ эшләү тәртибе. Ә. Ситдиҡованың “Бал еҫе”картинаһы буйынса инша.

**Синтаксис һәм пунктуация. Телмәр мәҙәниәте**

Синтаксис һәм пунктуация тураһында тәшәнсә. Һүҙбәйләнеш, Һүҙбәйләнештә эйәртеүсе һәм эйәреүсе һүҙҙәр. Интонацияға, һөйләү маҡсатына һәм хис - тойғо биҙәгенә ҡарап, һөйләмдәрҙең бүленеүе. Хәбәр, һорау, өндәү, бойороҡ һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡырға өйрәнеү, һөйләмдәр аҙағында тейешле тыныш билдәләрен ҡуя белеү. Ябай һәм ҡушма һөйләмдәргә синтаксик һәм пунктуацион анализ яһарға өйрәтеү. Һөйләмдең баш һәм эйәрсән киҫәктәре; эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы. Хәл. Йыйнаҡ һәм тарҡау һөйләмдәр. Тиң киҫәкле һөйләмдәр. Теркәүесһеҙ һәм теркәүесле тиң киҫәктәр эргәһендә тыныш билдәләре. Өндәш һүҙҙәр. Улар эргәһендә тыныш билдәләре. Ҡушма һөйләм тураһында төшөнсә. Тура телмәр. Тура телмәрле һөйләмдә тыныш билдәләре. Диалог. Диалог.Диалог алдында һыҙыҡ. Текст тураһында төшөнсә. Уның өлөштәре. Һөйләмдәрҙең үҙ - ара бәйләнеше. Ҡыҙыл юл. Текстарҙы өлөштәргә бүлеү,текст өлөштәрен ҡыҙыл юлдан яҙыу.

**Фонетика. Графика. Орфография. Орфоэпия. Телмәр мәҙәниәте**

Фонетика тураһында төшөнсә. Телмәр өндәре. Телмәр ағзалары. Өндәрҙең яһалышы. Һуҙынҡылар һөм тартынҡылар. Ҡалын һәм нәҙек һуҙынҡылар. Яңғырау һәм һаңғырау тартынҡылар. Өн һәм хәреф. Өндәрҙең яҙыуҙа хәрефтәр менән белдерелеүе. Алфавит. Орфография тураһында төшөнсә. Ижек, төрҙәре. Һүҙҙәрҙе юлдан - юлға күсереү. Баҫым. Баҫымлы һәм баҫымһыҙ ижектәр. Баҫымдың һуңғы ижеккә, һүҙ уртаһындағы һәм һуңғы ижеккә төшөү осраҡтары. Логик баҫым.Рус теленән үҙләштерелгән һүҙҙәрҙә баҫым. Өндәрҙең һуҙынҡыларға һәм тартынҡыларға,яңғырау һәм һаңғырау тартынҡыларға бүленеү сәбәптәрен аңлата белеү. Өйрәнелгән орфографик ҡағиҙәләрҙе системаға һала белеү

күнекмәһенә эйә булыу. Төп башҡорт һәм урыҫ телдәренән үҙләштерелгән һүҙҙрҙең баҫымдарын сағыштырыу күнекмәләрен булдырыу. Телдән һәм яҙып һүҙҙәргә фонетик анализ яһай белергә. Орфографик һүҙлекте файҙаланырға өйрәтеү.

**Лексика. Телмәр мәҙәниәте**

Лексика тураһында дөйөм төшөнсә. Терминдың мәғәнәһен асыу.Башҡорт теленең һүҙ байлығы. Һүҙлектәр. Мәктәп һүҙлектәре. Һүҙҙең лексик мәғәнәһе. Тура һәм күсмә мәғәнәле һүҙҙәр. Мәғәнәләре буйынса һүҙҙәрҙең төркөмдәре. Телдең лексик системаһының байлығын аңлау. Һүҙҙең лексик мәғәнәләрен билдәләй белеү. Тура һәм күсмә мәғәнәләге һүҙҙәрҙе таный белергә өйрәтеү. Синонидар. Антонимдар. Омонимдар.Күп мәғәнәле һүҙҙәрҙең мәғәнәләрен танырға һәм уларҙы телмәрҙә файҙаланырға өйрәтеү. Текстан синонимдарҙы, антонимдарҙы, омонимдарҙы таба һәм уларҙы телмәрҙә ҡуллана белергә күнектереү. Лексиканан белемде үҙ аллы тулыландырыу күнекмәһе булдырыу.

**Һүҙьяһалыш. Орфография. Телмәр мәҙәниәте**

Тамыр һәм ялғауҙар. Тамыр һәм һүҙҙең нигеҙе. Яһаусы һәм үҙгәртеүсе ялғауҙар. Һүҙьяһалыш. Һүҙҙәрҙә үҙгәртеүсе һәм яһаусы ялғауҙарҙың килеү тәртибе. Һүҙьяһалыш юлдары. Һүҙьяһалыш. Һүҙьяһалыш юлдары:

- һүҙгә ялғау ҡушыу юлы менән;
- һүҙҙәрҙе ҡушыу юлы менә;
- һүҙҙәрҙе парлау юлы менән;
- һүҙҙәрҙе бәйләү юлы менән;
- һүҙҙәрҙе ҡыҫҡартыу юлы менән.

Ҡушма һүҙҙәрҙең дөрөҫ яҙылышы: һүҙҙәрҙең тамырын, яһаусы, үҙгәртеүсе ялғауҙарҙы билдәләй белеү. Ярҙамсы һүҙҙәрҙе урын - ваҡыт килеш ялғауҙарынан айыра, һүҙҙең морфологик төҙөлөштәренә миҫалдар һайлай белеү күнекмәһен булдырыу. Һүҙҙәрҙе составы һәм яһалышы яғынан анализлау күнекмәһен үҫтереү. Төрлө юлдар менән яңы һүҙҙәр яһауға күнектереү.

**Морфология. Телмәр мәҙәниәте. Һүҙ төркөмдәре тураһында төшөнсә**

Үҙ аллы һәм ярҙамсы һүҙҙәр

**Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Исемдең дөйөм мәғәнәһе. Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу. Исемдәрҙең яһалышы Морфологик билдәләре һәм синтаксик вазифалары. Уртаҡлыҡ һәм яңғыҙлыҡ исемдәр. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Исемдәрҙең яһалыу юлдары.

Исемдәрҙең стилистик мөмкинлектәре. Исемдәрҙәге һәм уларҙағы ялғауҙарҙы дөрөҫ әйтеү һәм яҙыу күнекмәләре булдырыу. Уҡыусыларға һүҙьяһалыш юлдарын үткәндәалған белемдәрен ҡулланырға өйрәтеү, исемдәрҙең яһалыш юлдарын билдәләтеү. Ҡыҫҡартылған ҡушма исемдәрҙе телмәрҙә ҡулланыу күнекмәһе булдырыу.

**Ҡылым**

Ҡылымдың мәғәнәһе. Морфологик билдәләре. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Ҡылымдарҙың яһалыу юлдары. Ҡылымдарҙың затлы формалары. Һөйкәлештәре. Хәбәр һөйкәлеше. Мәғәнәһе,үткән,хәҙерге,киләсәк замандарҙа килеүе. Шарт һөйкәлеше ҡылымдары. Бойороҡ һөйкәлеше. Теләк һөйкәлеше ҡылымдары. Затлы ҡылымдарҙың мәғәнәләрен, морфологик билдәләрен,синтаксик ролен билдәләй алыу күнекмәһен булдырыу; үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдарҙы айыра белеү, төрлө ысул һәм саралар менән ҡылым яһау күнекмәһен үҫтереү. Ҡылымдың синтаксик вазифалары. Үҙ аллы һәм ярҙамсы ҡылымдар. Тамыр һәм яһалма ҡылымдар.

**Үтелгәнде ҡабатлау**

**Контроль диктанттар**

**Контроль изложение**

## 6 - сы класс

**Әсә теле тураһында әңгәмә**

**V кл. үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**Лексика**

Килеп сығышы яғынан башҡорт теленең һүҙлек составы.

Башҡорт телендә дөйөм һәм тар ҡулланылышлы һүҙҙәр. Интернациональ һүҙҙәр Профессиональ һүҙҙәр. Иҫкергән һәм яңы һүҙҙәр/ Диалект һүҙҙәре Нығынған һүҙбәйләнештәр.

**Исем һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Исем тураһында үтелгәнде ҡабатлау. Исемдәрҙең һан менән үҙгәреше. Исемдәрҙең эйәлек заты, килеш менән үҙгәреше. Исемдәрҙең хәбәрлек формаһы.

**Сифат һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Сифаттың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, синтаксик вазифаһы. Сифаттарҙың яһалыу юлдары. Төп һәм шартлы сифаттар.Сифат дәрәжәләре.Сифаттарҙың дөрөҫ яҙылышы.Синоним сифаттар.

**Һан һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Һандың мәғәнәһе, морфологик билдәләре, һөйләмдәге вазифалары.Ябай һәм ҡушма һандар. Уларҙың дөрөҫ яҙылышы. Һан төркөмсәләре.

**Алмаш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Алмаштың телмәрҙә үтәгән вазифаһы, мәғәнә үҙенсәлектәре, грамматик билдәләре. Алмаш төркөмсәләре. Алмаштың һан һәм килеш менән үҙгәреүе.

**Ҡылым һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Ҡылым төркөмсәләре. Ҡылым йүнәлештәре.

**Рәүеш һәм уны телмәрҙә ҡулланыу**

Рәүеш тураһында төшөнсә: белдергән мәғәнәһе, морфологик билдәләре. Синтаксик вазифалары. Рәүеш төркөмсәләре, яһалышы.

**Теркәүестәр**

Теркәүестәр һәм уларҙың телмәрҙәге функцияһы. Теркәүестәрҙең бүленеше.

**Бәйләүестәр**

Бәйләүестәрҙең телмәрҙәге вазифаһы. Уларҙың бүленеше.

**Киҫәксәләр**

Киҫәксәләрҙең морфологик билдәләре, телмәрҙәге вазифаһы. Киҫәксәләрҙең бүленеше.

**Мөнәсәбәт һүҙҙәр**

Мөнәсәбәт һүҙҙәр тураһында төшөнсә.

**Ымлыҡтар**

Ымлыҡтар тураһында төшөнсә, уларҙың морфологик һыҙаттары, телмәрҙәге вазифаһы. Төрҙәре.

**Бөтә үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**Контроль диктант**

**Контроль изложение**

**Инша**

**7 - се класс**

**Тел тураһында әңгәмә**

**Лексика, фонетика, морфология, орфография буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**Синтаксис һәм пунктуация, һүҙбәйләнеш, һөйләм, текст, һөйләмдә һүҙҙәр бәйләнеше**

Һүҙбәйләнеш, уның һөйләмдән айырмаһы, һүҙбәйләнештәрҙең төрҙәре тураһында төшөнсә. Һүҙбәйләнеш һәм ҡушма һүҙ. Һүҙбәйләнештәрҙә баҫым. Һөйләмдәге һүҙҙәр араһында теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнеш. Эйәртеүле бәйләнештәрҙең төрҙәре; башҡарылыу,йәнәшәлек, һөйкәлеү, эйә менән хәбәр араһында ярашыу бәйләнеше. Текст, уның өлөштәре.

**Ике составлы ябай һөйләмдәр**

Ике составлы һөйләмдәр тураһында төшөнсә. Һөйләмдең баш киҫәктәое. Эйәнең ябай һәм ҡушма һүҙҙәрҙән килеүе. Ябай һәм ҡушма хәбәр. Эйә менән хәбәр араһында һыҙыҡ. Ҡушма хәбәрҙәр. Тиң һәм тиң булмаған аныҡлаусылар. Улар эргәһендә тыныш билдәләре. Өҫтәлмәлек. Улар эргәһендә тыныш билдәләре. Тура һәм ситләтелгән тултырыусы.

**Бер составлы һөйләмдәр**

Бер составлы һөйләмдәр тураһында төшөнсә. Бер составлы һөйләмдәрҙең төрҙәре. Кәм һөйләмдәр.

**Тулы һәм кәм һөйләмдәр**

Тулы һәм кәм һөйләмдәр тураһында төшөнсә, кәм һөйләмдәрҙең айырмаһы.

**Тиң киҫәкле һөйләмдәр**

Интонация менән бәйләнеп килгән тиң киҫәктәр, теркәүестәр менән бәйләнеп килгән тиң киҫәктәр. Улар араһында тыныш билдәләре. Тиң киҫәктәр эргәһендә дөйөмләштереүсе һүҙҙәр. Улар эргәһендә тыныш билдәләре.

**Һөйләмдең айырымланған эйәрсән киҫәктәре**

Айырымланыу тураһында төшөнсә. Эйәрсән киҫәктәрҙең айырымланыуы. Улар эргәһендә тыныш билдәләре. Хәл әйтемдәре эргәһендә тыныш билдәләре. Айырымланған эйәрсән киҫәктәр менән айырымланған хәл араһында оҡшашлыҡ һәм айырма.

**Өндәш һүҙе, инеш һүҙе, инеш һөйләме һәм ымлыҡтары булған һөйләмдәр**

Өндәш һүҙҙәр. Өндәш һүҙҙәрҙең мәғәнәүи үҙенсәлектәре, уларҙың һөйләмдәге урыны. Өндәш һүҙҙәр янында тыныш билдәләре. Инеш һүҙле, инеш һөйләмле һөйләмдәр.

Ымлыҡтар. Улар эргәһендә тыныш билдәләре.

**Тура һәм ситләтелгән телмәр**

Тура телмәр. Тура телмәр эсендә автор һүҙҙәре. Тура телмәрле һөйләмдәр эргәһендә тыныш билдәләре. Ситләтелгән телмәр, уның тура телмәрҙән айырмаһы. Цитата. Уның янында тыныш билдәләре. Диалог.

**5 - 7 кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**Контроль диктант**

**Изложение**

**Инша**

## <u>8 - се класс</u>

**Синтаксис буйынса үтелгәндәрҙе ҡабатлау**

**Ҡушма һөйләмдәр**

**Теҙмә ҡушма һөйләмдәр**

Теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре. Теркәүесле теҙмә ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә, уларҙа тыныш билдәләре

Теркәүесле һәм теркәүесһеҙ теҙмә ҡушма һөйләмдәрҙе дөрөҫ интонация менән уҡыу , уларҙы һөйләү һәм яҙма телмәрҙә ҡулланыу күнекмәләрен үҫтереү.

**Эйәртеүле ҡушма һөйләмдәр -**

Баш һәм эйәрсән һөйләмдәр. Эйәрсән һөйләмдәрҙең баш һөйләмгә бәйләнеп килеү ысулдары:

1) теркәүестәр
2) бәйләүестәр
3) килеш ялғауҙары
4) интонация
5) мөнәсәбәт һүҙҙәр

Эйәрсән һөйләмдәрҙең төрҙәре. Улар эргәһендә тыныш билдәләре. Эйә, хәбәр, аныҡлаусы, тултырыусы эйәрсән һөйләмдәр. Хәл һөйләмдәр – ваҡыт, урын, рәүеш, күләм - дәрәжә, маҡсат, сәбәп, шарт һәм кире эйәрсән һөйләмдәр.

**Ҡатмарлы синтаксик төҙөлмәләр**

Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Күп эйәрсәнле ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре.

Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәр тураһында дөйөм төшөнсә. Ҡатнаш ҡушма һөйләмдәрҙә тыныш билдәләре. Теҙем тураһында дөйөм төшөнсә. Уларҙың стилистик роле.

**Тыныш билдәләренең ҡуйылышы**

**Үткәндәрҙе дөйөмләштереп ҡабатлау**

**Контроль диктант**

**Изложение**

**Инша**

## 9 - сы класс

**Тел тураһында дөйөм төшөнсә**

Йәмғиәт тормошонда телдең роле. Тел – үҫә барыусы ижтимағи күренеш. Башҡорт теле – башҡорт халҡының милли теле. Башҡорт әҙәби теле. Башҡа ҡәрҙәш төрки телдәр араһында башҡорт теленең урыны. Әҙәби тел һәм диалект тураһында дөйөм төшөнсә. Башҡорт теленең диалекттары. Башҡорт әҙәби теле һәм уның үҫеше. Ике теллелек.

**Башҡорт әҙәби теленең стилдәре**

Стилистика тураһында дөйөм төшөнсә. Әҙәби телдең стилдәре:йәнле һөйләү стиле, фәнни, рәсми (эш ҡағыҙҙары), эпистоляр(хаттар), публицистик стилдәр,күркәм (художестволы) әҙәбиәт стиле. Уларҙың төп үҙенсәлектәре.

**Һүрәтләү саралары**

Һүрәтләү саралары – күркәм әҙәбиәт стиле саралары. Эпитет, сағыштырыу, метафора, лексик һәм грамматик синонимдар

**VII-IX кластарҙа үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм системаға һалыу.**

**Фонетика. Графика. Орфоэпия. Орфография.**

Фонетиканың төп төшөнсәләре. Телмәр өндәренең яһалышы. Графика һәм алфавит. Башҡорт теленең алфавиты. Башҡорт яҙыуы тарихынан ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр. Һуҙынҡы өндәр. Тартынҡы өндәр. Тартынҡы өндәрҙең сиратлашыуы. Сингармонизм. Ассимиляция. Диссимиляция. Һүҙҙең баҫымы. Орфоэпия һәм орфография. Орфографияның принциптары.

**Лексика**

Лексиканың төп төшөнсәләре. Башҡорт теленең һүҙлек составы, уның үҫә барыуы һәм байыуы. Хәҙерге осорҙа башҡорт теле лексикаһының үҫеү юлдары. Башҡорт теле лексикаһының стилистик бүленеше. Төрлө ҡатлам лексик

берәмектәрҙең ҡулланыу үҙенсәлнктәре. Башҡорт теленең фразеологияһының үҫеүе һәм байыуының сығанаҡтары. Телмәрҙә фразеологик берәмектәрҙе ҡулланыу. Аңлатмалы һүҙлек һәм уның төрҙәре.

**Һүҙҙең төҙөлөшө һәм һүҙьяһалыш. Морфология.**

Тамыр һүҙ һәм яһалма һүҙ. Һүҙ һәм форма яһаусы ялғауҙар. Һүҙ үҙгәртеүсе ялғауҙар. Ҡайһы бер ялғауҙарҙың күп мәғәнәлеге, омоним ялғауҙар. Һүҙҙең яһалыу юлдары. Һүҙҙәрҙе составы, яһалышы һәм этимологик яҡтан анализлау.Этимологик, һүҙьяһалыш һүҙлектәре.Хәҙерге башҡорт телендә һүҙ төркөмдәре системаһы. Һүҙҙәрҙе һүҙ төркөмдәренә бүлеүҙең принциптары. Телмәрҙә үҙ аллы һәм ярҙамсы төркөмдәренең роле. Һүҙҙең грамматик мәғәнәһе. Һүҙ төркөмдәренең төп категориялары. Һан, эйәлек заты, хәбәрлек заты, килеш. Килештәрҙең мәғәнәләре. Башҡорт телендә ҡылымдарҙың төрҙәре. Һөйкәлеш, зат, заман категорияларының һөйләмдәрҙе төҙөүҙәге роле. Алмаштарҙың , рәүештәрҙең телмәрҙәге роле. Башҡорт телендә ярҙамсы һүҙҙәрҙең составы һәм урыны. Һүҙҙәрҙең бер һүҙ төркөмөнән икенсеһенә күсеүе.

**Синтаксис һәм пунктуация**

Синтаксистың төп берәмектәре. Хәҙерге башҡорт теленең һүҙбәйләнештәр һәм һөйләмдәр системаһы. Синтаксиста теҙмә һәм эйәртеүле бәйләнештең төрҙәре, ысулдары. Синтаксик сараларҙың синонимия һәм уларҙың стилистик биҙәктәре. Башҡорт телендә тыныш билдәләренең системаһы һәм уны ҡабатлау.

## Тематик план

| Темалар | 5 | 6 | 7 | 8 | 9 |
|---|---|---|---|---|---|
| Тел тураһында дөйөм төшөнсә | 1 | 1 | - | - | 6 |
| Телдең функциональ төрлөлөгө | | | | - | 7 |
| Телмәр эшмәкәрлеге | | | 7 | 1 | |
| Синтаксис һәм пунктуация.Телмәр мәҙәниәте. | 16 | - | 40 | 39 | 4 |
| Фонетика һәм графика. Орфография. Телмәр мәҙәниәте | 14 | - | - | - | 7 |
| Лексика. Фразеология. Телмәр мәҙәниәте. | 5 | 8 | - | - | 9 |
| Һүҙъяһалыш һәм орфография. Телмәр мәҙәниәте. | 10 | - | - | - | 4 |
| Морфология. Орфография. Телмәр мәҙәниәте. | 27 | 66 | - | - | 14 |
| Стилистика. Телмәр мәҙәниәте. | - | - | - | - | |
| Үтелгәндәрҙе ҡабатлау һәм дөйөмләштереү | 6 | 6 | 7 | 11 | 2 |
| Диктанттар | 9 | 6 | 6 | 6 | 3 |
| Телмәр үҫтереү | 17 | 11 | 10 | 10 | 10 |
| Тестар. Ижади эш | - | 7 | - | 3 | 4 |
| Бөтәһе | 105 | 105 | 70 | 70 | 68 |